## 12 –се практик эш

**Тема:** Яҡшы уҡыу – яҡшы белгес булыу. Хорошо учиться – быть хорошим специалистом.

**Башҡарыласаҡ эш төрҙәре:** ҡылымдың киләсәк заманын барлыҡҡа килтереү буйынса практик биремдәр башҡарыу.

**Наименование работы:** выполнение практических заданий на образование формы будущего времени глагола.

**Маҡсат:** ҡылымдың киләсәк формаһын өйрәнеү, уҡыу, буласаҡ һөнәр тураһында әңгәмәләшеү буйынса күнекмәләр булдырыу.

**Цель:** формирование умений и навыков по образованию формы будущего времени глагола, составлению текстов и диалогов о будущей профессии.

**Ваҡыт нормаһы:** 2 сәғәт.

**Әҙәбиәт:** 1.Усманова М.Ғ., Солтанғолова З.З. Башҡорт теле: башҡорт теле дәүләт теле итеп уҡытылған һөнәри белем биргән ойошмалар өсөн уҡыу ҡулланмаһы. Өфө: Китап, 2015.

**Техник хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре:**

1.Эште инструкцион – технологик карта буйынса башҡарырға.

2.Эш урынын тәртиптә тоторға. 3.Кеҫә телефондарын һүндерергә.

**Инеш инструктаж (письменно)**

| Киләсәк заман ( будущее время) | Зат ялғауҙары (аффиксы лица) берлектә | Зат ялғауҙары (аффиксы лица) күплектә | Миҫалдар (примеры) |
|---|---|---|---|
| **1- се формаһы: -а, -ә, -й** | **1- се зат: - м, - ым, - ем, - ом, - өм**<br>**2 –се зат: - һың, -һең, -һоң, - һөң**<br>**3 –сө зат: -----** | **1–се зат: - быҙ, - беҙ, - боҙ, - бөҙ**<br>**2 – се зат: - һығыҙ, - һегеҙ, -һоғоҙ, - һөгөҙ**<br>**3 – сө зат: ----** | Мин бар**ам** – **иртәгә** мин бар**ам**<br>Беҙ бар**абыҙ** – **кис көнө** беҙ бар**абыҙ** |
| **2 - се формаһы: -р, -ыр, - ер, - ор, - өр** | **1-се зат: - мын, - мен, - мон, - мөн**<br>**2 -се зат: - һың, - һең, - һоң, - һөң**<br>**3-сө зат: ----** | **1–се зат: - быҙ, -беҙ, - боҙ, - бөҙ**<br>**2-се зат: - һығыҙ, - һегеҙ, - һоғоҙ, - һөгөҙ**<br>**3 –сө зат: ---** | Мин бар**ырмын**<br>Ул бар**ыр**<br>Һеҙ бар**ырһығыҙ** |
| **3 –сө формаһы - асаҡ, - -әсәк, - ясаҡ, - йәсәк** | **1 –се зат: -мын, -мен**<br>**2 – се зат: - һың, - һең**<br>**3 –сө зат: ----** | **1 –се зат: - быҙ, - беҙ**<br>**2 –се зат: - һығыҙ, - һегеҙ**<br>**3 –сө зат: ----** | Мин бар**асаҡмын**<br>Беҙ бар**асаҡбыҙ** |

2. Һүҙлек: белем – образование, знание

белем алыу – получать образование

белемле кеше – образованный человек

белемле – образованный

белем биреү – обучать

белемһеҙ - необразованный

юғары белемле кеше – человек с высшим образованием

**Эш башҡарыуҙың йөкмәткеһе һәм эҙмә – эҙлелеге**
**(Содержание и последовательность выполнения работы):**

**1-се бирем**.1. Тексты уҡығыҙ, тәржемә итегеҙ (прочитайте и переведите текст) 50 – се (52 - се) бит, 25 – се (23 - сө ) күнегеү.

Интернетты кем уйлап тапҡан?

Компьютер селтәре аша тәүге һөйләшеү 1969 йылда Лос – Анджелес, Стенфорд, Санта – Барбара һәм Юта университеттары араһында була.

1971 йылда Америка Ҡушма Штаттарының төрлө мөйөштәрендәге 23 компьютер араһында бәйләнеш булдырыла. 1973 йылда селтәргә Лондондың университет колледжы, Норвегияның дәүләт хеҙмәттәре тоташа. Интернет ойоштороу тураһында фекерҙәр йөрөй башлай. E – mail, йәғни электрон почта барлыҡҡа килә.

1977 йылда Интернет менән файҙаланыусылар һаны - 100, 1984 йылда – 1000, 1986 йылда – 5 меңдән ашыу, ә 1989 йылда 100 меңдән арта.

1991 йылда Word Wide проекты тормошҡа ашырыла. Был ваҡытта Интернет ҡулланыусыларҙың һаны 19,5 миллиондан ашҡан була.

**2 –се бирем. Работа по карточкам.** Ҡылымдың киләсәк заманын барлыҡҡа килтерегеҙ (от любого глагола образуйте три формы будущего времени).

**3-сө бирем. Вариантлап эшләү.** Мәҡәлдәрҙе тәржемә итегеҙ, ҡылымдарҙың заманын билдәләгеҙ (Переведите пословицы на башкирский язык. Определите время глаголов): **1 – се вариант:** Аҡыллыға аҡыл бирһәң, ҡулын бирер, аҡылһыҙға аҡыл бирһәң, ҡысҡырып көлөр. Уҡыу – энә менән ҡойо ҡаҙыу. **2 – се вариант:** Егәрле килер, эш арттырыр, эшһеҙ килер, эш ҡалдырыр. Ир үлһә, ил көйөнөр, дошман һөйөнөр.

**4 –се бирем.** Һүҙҙәрҙе тәржемә итегеҙ (переведите слова): группа, специалист, учеба, хорошо, плохо, средне, учусь, однокурсник, книга, урок, карандаш, учебник, дневник, тетрадь.

**5 – се бирем.** “Минең буласаҡ һөнәрем” темаһына диалог яҙығыҙ (напишите диалог на тему “Моя будущая профессия”).

**Практик биремдәрҙе башҡарғандан һуң студент (После выполнения заданий студент) белергә тейеш (должен знать):** ҡылым, киләсәк заман ялғауҙарын (аффиксы, образующие будущее время); **эшләй һәм ҡуллана белергә тейеш (должен уметь):** киләсәк заман аффикстарын, текст уҡырға һәм диалог төҙөргә (применять аффиксы, образующие будущее время, читать и переводить тексты, составлять диалоги).

**Контроль һорауҙар һәм биремдәр ( Контрольные вопросы и задания):**

1.Бирелгән ҡылымдарҙы тәржемә итегеҙ (переведите следующие глаголы): любить, кушать, сидеть, жить, прийти, уйти, учиться, работать, писать (письменно) 2. Диалогты уҡығыҙ: 43 – сө (47 – се) бит (устно).

**Студенттарҙың үҙ аллы эше өсөн биремдәр (Задание для самостоятельной работы студентов):** Л1. 46 - 49 – сы биттәр. Текст тәржемә итергә (Л1. стр.46 – 49. Перевести текст).

Уҡытыусы _______ Мөхөтдинова Ф.Р.